*Фәнил КҮЗБӘКОВ*

# Ожмахы ла, тамуғы ла — ерҙә!

## (Суфиян Поварисовтың Ғәлимйән Ибраһимов яҙмышын художестволы сағылдырған трилогияһына бәйле уйланыуҙар)

Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы тигән шөһрәтле исемгә лайыҡ булған прозаик, драматург, публицист Суфиян Шәмсетдин улы Поварисовты әҙәбиәт һөйөүселәр яҡшы белә. Ғүмере буйына тиерлек ул (1960 йылдан алып) Башҡорт дәүләт университетында эшләне, филология буйынса кандидатлыҡ, докторлыҡ диссертациялары яҡлап, профессор дәрәжәһенә тиклем күтәрелде.

Өлкән ҡәләмдәшемдең башҡаларҙы ылыҡтырып ҡылыҡһырларҙай төп һыҙаттары тураһында уйланам да — тәбиғи һәләтенә нигеҙләнгән яугирлыҡ, баҫалҡылыҡ, егәрлектер тигән һығымтаға киләм. Һәм, әлбиттә, маҡсатҡа ынтылышлы ныҡышмал хеҙмәт, хеҙмәт, хеҙмәт...

Эйе, Илеш районының Тыпый ауылында донъяға күҙ асып, тормошҡа саҡ үҙаллы аяҡ баҫҡанда тәү сиратта яугир булараҡ формалашырға тура килә уға. 17 йәше тулып та өлгөрмәгән, янып торған ҡарашлы, типһә тимер өҙөрҙәй дәртдарманлы егет. Илдең көнбайышында дәһшәтле һуғыш уты көсәйгәндән-көсәйә бара. Тура фронтҡа атлыҡҡан Суфиянды Алкиндағы минометсылар әҙерләү курсына ебәрәләр. 1942 йылдың авгусынан еңеүгәсә — фронтта.

Артиллерияны юҡҡа ғына «Һуғыш Аллаһы» тип атамағандарҙыр. Ул телгә килгәндә, барсаһы ла шымып ҡала. Күк күкрәй, ер тетрәй — көн менән төн бутала, аң томалана. Бар йән эйәһендә бер генә уй: ҡасан тамамланыр был тамуҡ алды ғәрәсәте?!

Башҡортостанда ойошторолған Салауат Юлаев исемендәге артиллерия полкында һуғыша Суфиян. Полктың хәрби берәмек булараҡ әһәмиәтен самалау өсөн уның туранан-тура Юғары баш командующийға буйһоноуын күҙаллау ҙа етәлер.

Буласаҡ әҙип — минометсылар расчеты командиры. Фронтовиктар белдереүенсә, һуғышта бер кемгә лә еңел түгел. Әммә һәр береһенең үҙенсәлекле яҡтары бар: ерҙәгеләр ергә һыйына, диңгеҙҙәгеләргә, һауалағыға был мөмкинлек хәрби бурысты үтәгәс кенә мөмкин буласаҡ. Яугир ҡоралы менән көслө. Алға барғанда ла, сигенгәндә лә ҡоралын ул күҙ ҡараһындай һаҡларға тырыша. Миномет ҡарамаҡҡа ғына ябай: «тимер торба» ла, уны ултыртыу өсөн яйланған ҡалын тимер «яҫтыҡ». «Торбаһы» үҙе генә лә центнер тирәһелер. Ана шул тимерҙе йөрөтөп ҡара инде. Яҙын-көҙөн, эҫелә, һыуыҡта. Ҡурғаш ямғыры аҫтында! Тәгәрмәсле туптарҙан айырмалы рәүештә, уны ат менән, йә техникаға тағып һөйрәтеп булмай, күтәреп йөрөтөргә тура килә. Суфиян ағайҙың шулай һөйләгәне хәтерҙә: «Ҡисеү аша йылғаны сығырға кәрәк ине. Тамам хәлдән

тайғанбыҙ. Торба икәүгә лә көс еткеһеҙ күренә. Расчеттағы башҡорт егете: «Нисек тә иңемә һалығыҙ!» — тине. Һалдыҡ. Сайҡала-сайҡала атлап китте теге. Йылғанан сыҡҡанын тын да алмай күҙәтәбеҙ, дошман утынан да һаҡларға кәрәк. «Ну, малай, бүре менән алышырлыҡ икәнһең!» — тине аҙаҡ ротный. «Ҡәмһетмә, лейтенант, — ти уға егет. — Беҙҙең халыҡ айыу менән көрәшерлек ул!»

Әлбиттә, Суфиян һуғышта команда биреп кенә йөрөмәй: кәрәк икән, йөктөң иң ауырын үҙе башлап күтәрешә, ҡоралды үҙе хәстәрләй, ҡора, тоҫҡай, ата. Уның расчеты полкта тикмәгә генә иң мәргәне иҫәпләнмәгәндер, күрәһең.

Тыныс тормошта ла ул күҙәтеүсе түгел, ә уның эсендә ҡайнай. Уйһыҙ-ниһеҙ түгел, ә маҡсатлы йәшәргә ынтыла. Мәктәптә уҡыта, директор булып эшләй. Үҙе лә уҡый. Белемеңде даими үҫтерә барғанда ғына башҡаларға һабаҡ бирә алырлыҡ кимәлең дә, әхлаҡи хоҡуғың да була алыуын күңеле менән яҡшы аңлап эш итә ул. Ҡанға һеңә барған был ғәҙәт, көндө төнгә ялғаған хеҙмәт аҙаҡ уға ижадта ла нык ярҙам итәсәк. Тиҫтәнән ашыу роман, биш-алты повесть, хикәйәләр, шиғыр-поэмалар, комедия-драмалар, уҡыу әсбаптары, иҫәпһеҙ-һанһыҙ мәҡәләләр... «Былдай тауҙай эште нисек атҡара алдығыҙ», — тигән һорауға: «Үҙемә шундай талап ҡуйғанмын: көн һайын кәм тигәндә лә өс бит!» — ти ул туғыҙ тиҫтә йылдарҙы тултырып йөрөгән көндәрҙә.

Күренеүенсә, әҙиптең ижадын тулайым күҙаллау бер мәҡәлә сиктәрендә башҡара алырҙай эш түгел. Шуға ла беҙ уның трилогияһына ғына ҡағылышлы ҡайһы бер фекерҙәр менән уртаҡлашмаҡсыбыҙ.

Әҙәби тәнҡитте ошоғаса төрлөсә аңлау йәшәп килә. Ижад кешеһе хуплау-йөпләүгә мохтаж бит, шуға ыңғай яҡтарына иғтибар туплау ғәмәлгә ярашлыраҡ, тип иҫәпләй күпселек. Былдайҙарға объектив баһа бирергә ынтылыу ғына ла аҡыл өйрәтеү, йәиһә кәрәкмәгәнгә күҫәк күтәреү булып күренеүсән. 90 йәшлек әҙипте нимәгәлер өйрәтергә тырышыу мәғәнәһеҙлек кенә түгел, ахмаҡлыҡ булыуын аңлатып тороу кәрәкмәй. Ғөмүмән, ижадта өйрәнеү-өйрәтеү бик сетерекле мәсьәлә. Ижад — үҙе үк эҙләнеү, бығаса билдәле булмағанды асыҡлау-табыу, яңыса эшләү бит ул. Инде күптәргә яҡшы таныш булған күренеш-ваҡиғаларҙы ла үҙеңсә күреү, үҙеңсә һүрәтләү, үҙеңсә баһалау... Ошондай ҡарашҡа нигеҙләнгән осраҡта, милли рухиәттең киләсәген ҡайғыртҡан әҙәби тәнҡитсе әҙиптең үҙен генә түгел, уның бөгөнгө һәм иртәгәге уҡыусыларын күҙ уңында тотоп, һүҙ барған әҫәрҙең милли әҙәби процестағы урынын билдәләргә, донъя кимәлендәге сәнғәт әҫәрҙәре фонында баһаларға, дөйөм фәлсәфәүи асылын асыҡларға ынтыласаҡ. Ил өсөн тигәндәргә былдай фекер дәлилдәрһеҙ ҙә аңлашылыр һәм ихлас ҡабул ителер, ә көн өсөн йөрөгәндәр ана шул үҙенең шәхси аршынынан киңерәк күренеште һис кенә лә аңлай ҙа, аңлата ла алмаясаҡ.

Әҙиптәрҙең дә маҡтау-данлауға мохтаждары етерлек, әлбиттә. Парадокс: яңғыҙ йөрөп юл тапҡансы, күмәкләшеп аҙашыуың хәйерлерәк. Әммә кемгәлер хәҡиҡәт ҡимм әтерәк шул барыбер. Былдайҙар хатта иң яҡын дуҫына, улай ғына ла түгел, остазына дөрөҫөн ярып һаласаҡ, ысынбарлыҡты йәшереү өсөн яһалма томан ебәрмәйәсәк, сөнки «Әфләтун миңә дуҫ та ул, тик дөрөҫлөк ҡиммәт» (Аристотель) тигән принциптан сығып эш итәсәк.

Суфиян Поварисовтың биографияһы менән таныш уҡыусы трилогияның төп геройы — Ғәлимйән Ибраһимовтың яҙмышы авторҙыҡы менән күпмелер дәрәжәлә уртаҡ булыуын мотлаҡ иғтибарға алыр: икеһе лә Башҡортостан

ерлегендә формалашҡан татар телле шәхестәр. Уларҙы шулай уҡ мөғәллимлек, фән әһеле булараҡ тәү сиратта тел, әҙәбиәт, рухиәт мәсьәләләре менән ҡыҙыҡһыныу һәм әҙип сифатында танылыу берләштерә. Бындай уртаҡлыҡтар Суфиян Поварисовҡа геройҙың эске донъяһына тәрән үтеп инергә, уның холоҡ-фиғелен, уй-ниәттәрен, эшмәкәрлеген психологик яҡтан төплө нигеҙләп, тормошсан һүрәтләргә мөмкинлек биргән.

Эпопеяның тәүге өлөшө «Пәйғәмбәр таңы» тип аталһа ла, Ғәлимйән һис кенә лә идеаллаштырылмай. Ул — ҡәҙимге ауыл малайы. Башҡаларҙан мулла балаһы булыуы, үҙһүҙлелеге менән генә айырылып торалыр. Әммә тап ана шул шарттар (абруйлы, хөрмәткә лайыҡ ғаиләлә үҫеү), характерҙағы ҡылыҡ (ыңғай мәғәнәһендәге үҙһүҙлелек, алдына алғанды бер ниндәй ҡаршылыҡтарға ла ҡарамайынса бойомға ашырыуҙағы ныҡышмалылыҡ) уға милләттең шул дәүерҙәге рухи пәйғәмбәре (һис бер шаштырыуһыҙ!) кимәленә күтәрелергә ярҙам итә лә инде.

Әҙип геройҙың көслө шәхес булып формалашыуын, быуынға ултырыуын ентекле, дәлилле, ҡапма-ҡаршылыҡлы ваҡиғалар эсендә, мауыҡтырғыс итеп һүрәтләй. Ябай халыҡ менән тығыҙ аралашыуын, ҡайғыһын да, шатлығын да уртаҡлашып үҫеүен иҫтә ҡалырҙай тормошсан күренештәр солғанышында күрһәтә. Был йәһәттән бигерәк тә, ир-егетлекте үҙенсә аңлап, үҙен-үҙе «Ат ҡарағы» тип исемләгән, ғәмәлдә иһә башҡаларҙың энәһенә тейеүҙе лә гонаһ иҫәпләгән Хөрмәтулла образы бик фәһемле. Ун ике йәшлек үҫмергә алыптай кәүҙәле, шаҙра йөҙлө, йөнтәҫ күкрәкле был «ғифрит» башта ҡотһоҙлоҡ билдәһе булып күренә. Әммә тегеһе, гармунын алып, үҙе уйнап, үҙе йырлай башлағас, хайран ҡала. Етмәһә, уны ирләргә йыйынған еңгәй ҙә йырға ҡушыла. «Былар үҙҙәре түгел, йөрәктәре йырлай», — тигән фекергә килә Ғәлимйән. Аңлау менән генә лә тынысланып ҡалмай, ә үҙенә һорау артынса һорау бирә, уларға яуап табырға тырыша. Матурлыҡ менән ҡотһоҙлоҡ гел шулай алмашынып торамы? Әллә матурлыҡ эсендә лә йәмһеҙлек бармы? Киреһенсә лә буламы? Ана, Аҡ инәйҙең (кендек әбейенең) ҡараңғы баҙ төҫлө өйөндә аҡ күңелле кешеләр йәшәй бит...

Хөрмәтулланың «Ат ҡарағы» данын йөрөтөүгә күршеһенә, «самаһы санаһына һыймай башлаған» Мөбәхис мәзингә, һарығы юғалғас (Мәжит Ғафуриҙың «Һарыҡты кем ашаған?» мәҫәле иҫкә төшә), уны бурлыҡта ғәйепләүгә сәбәп була. Хөрмәтулла ағайҙың күңел байлығын, эскерһеҙлеген тойоп-күреп өлгөргән Ғәлимйән уның бындай түбәнлеккә төшә алырына һис кенә лә ышанмай. Һәм ул хаҡлы булып сыға. Яҙмышына тамған ҡара тапты Хөрмәтулла Ғәлимйәндең дуҫтары, Ғирфан мулла, уны яҡшы белгән башҡалар ярҙамында ағарта ағартыуын, әммә хаслашҡан бәндәләр тәүге мөмкинлек тыуыу менән уны Себер оҙата. Бына ошондай ваҡиғалар ҡаҙанында ҡайнап, сыныға бара төп герой. Тормоштоң ҡапма-ҡаршылыҡлы булыуын күреп үҫә, әҙәм балаларының төрлөһө менән аралаша. Ғәҙелһеҙлек менән һис кенә лә килешергә теләмәй. Социаль тигеҙһеҙлектең сәбәптәрен төпсөү өсөн тәрән ғилем кәрәклеген төшөнә бара. Уның һәр йәһәттән үҫә барыуы үҙенән йәшкә өлкәнерәк Йософ мәхдүм менән аралашыуында ла күренә. Мөбәхис мәзиндең иртәнге намаҙға аҙан әйткән тауышына бәйле Йософтоң: «Бына кемдә икән ул моңдоң илаһилығы», — тиеүенә, Ғәлимйән: «Ул моңдоң эсендә ҡара шәүлә бар...» — тип аныҡлай. Ә инде Хөрмәтулла менән танышҡас, Йософ: «Мин бәләкәй кешенең оло йөрәген

аңланым», — тиәсәк. Ғәлимйән иһә: «Мин кешеләрҙе бәләкәйгә, ҙурға айырмайым», — тип яуаплар.

Хөрмәтулла нахаҡҡа ҡаты туҡмалғандан һуң аҡрынлап аяҡҡа баҫа, Ғирфан муллаға хәйер килтергәс, уға аҙыҡ-түлек, кейем-һалым биреп ебәрәләр. Ир-егет булһа ла, күңеле тула азаматтың. «Был илау шатлыҡтан ине, — ти автор. — Ҡайғы йәше әсе, шатлыҡ йәше сөсө була... Хөрмәтулла Ғирфан мулланың ҡапҡа төбөндә гәүһәр йәш ҡалдырып китте. Ул гәүһәрҙә — ярлы-ябағайҙың йөрәк йылыһы, күңел ҡайнарлығы, бәхет өмөт итеү сатҡыһы ине...»

Ысынында ла. Уйлай китһәң, 1930-сы йылдарҙа күпме кешене, сәбәпһеҙ рәнйетеп, Себер һөрҙөләр, эшләгәненең мәнфәғәтен күрһәтмәйенсә, асҡа үлмәҫлек кенә түләй килделәр, инде килеп, хәләл тирен түгеп, бер нисә быуын тинләп йыйған һаҡлыҡ монаятын бер көн эсендә юҡҡа сығарҙылар. Тотош халыҡтың рәнйешен алыусыларҙың ике донъялыҡтың да рәхәтен татый алыуы бер ниндәй ҙә ғәмәлгә һыйырлыҡ түгел. Ҡиреһенсә була ҡалғанда, был йәшәүҙәрҙең мәғәнәһе юғалыр, миҙгел-миҙгел йәшәреп тороусы тормош ағасының үҙәге серек булыр ине... Шуныһы ҡыҙғаныс: әҙәм балалары араһында көнләксөләре (бөгөнгөһө менән генә йәшәүселәр) күберәк шул.

Ғәлимйән шәфҡәтлеләрҙән-шәфҡәтлерәк әсәй, эшкә өйрәтеүсе, тәҡүәле, әммә дингә фанатиктарса бирелмәгән мәғрифәтсе мулла, ҡаты ҡуллы атай тәрбиәһе күреп үҫә. Атаһы ла, әсәһе лә уға ҙур өмөттәр бағлай. Шуға атаҡлы мәҙрәсәләрҙә уҡыуын да хәстәрләйҙәр. «Хөсәйениә»гә һаулығы йомшаҡ булыуы арҡаһында инә алмағас, атаһы уны Ырымбурҙағы Вәли мулла мәҙрәсәһенә ҡалдыра. Ағаһы теге мәҙрәсәлә. Ҡустыһына күҙ-ҡолаҡ та булыр. Әммә Рәсәйҙе инҡилап елдәре дер һелкетә башлаған бер мәлдә Ғәлимйән ише алдынғы ҡарашлы шәкерттәр көн өсөн генә йөрөгән хәлфәләрҙең һабағы менән генә мөрхәтһенмәүҙәрен тиҙ белдерә. Һөҙөмтәлә, ундайҙар уҡыу йортонан ҡыуыла. Ошондай ваҡиғаларҙа Ғирфан мулланың ҡапма-ҡаршылыҡлы ҡырыҫ холҡо асыла ла инде. Атаһын яҡшы белгән Ғәлимйәндән елдәр иҫкән. Күҫәктең ауыр башы оло улына, Шәкирйәнгә төшә, күңел китерлек, ғүмер онотолмаҫлыҡ һүҙҙәр әйтеп ташлай:

— Һин, мәхлүк йән эйәһе, берҙән-бер энеңә күҙ-ҡолаҡ булып тора алманың, ебегән, арыш боламығы, серегән көпшә...

Күренеүенсә, автор тормоштоң соҡор-саҡырлы, һаҙлы-күтерле урындарын, геройҙар ҡылығындағы ҡытыршылыҡтарҙы шымартмай ҙа, ялтыратмай ҙа. Хәл-ваҡиғаларҙы барса ҡапма-ҡаршылығында, ҡырыҫ дөрөҫлөгөндә һүрәтләргә ынтыла. Һәр осор яңырып торған аталар менән балалар конфликтын да урап үтмәй: Ғәлимйәндең йән үрһәләнеүҙәрен зиһенле уҡыусы ышанырлыҡ дәрәжәлә асып һала: «Атай-әсәй! Улар хәтерен һаҡлап йәшәү кәрәк тә бит. Ә нисек һаҡларға? Тормош бөтөнләй башҡаса йәшәргә ҡуша. Атай-әсәй әйткәнсә түгел. Атаһы үҙе лә мәҙрәсәне ташлап киткән бит. Ауылға ҡайтҡан. Донъя көтөргә...»

Трилогияның икенсе өлөшөндә («Күктең етенсе ҡатында») — төп геройҙың «Ғәлиә» мәҙрәсәһендә уҡыу-уҡытыу осоро. Әммә был арауыҡ та ваҡиғаларға бик тығыҙ. Уҡыу өсөн аҡса яғынан ата-әсәһе ярҙам итә алыр ине алыуын. Әммә Ғәлимйән икенсерәк фекерҙә: уға тормошто, кешеләрҙе ныҡлап өйрәнәһе бар, үҙаллылыҡ та кәрәк, ғаиләгә лә йөк булаһы килмәй. Шуға ул ҡаҙаҡ далаларында мөғәллимлек итеү менән шөғөлләнә, Миәс заводында ла эшләп йөрөй. Хикәйәләре ташҡа баҫыла башлай («Зәки шәкерттең мәҙрәсәнән ҡыуылыуы», «Татар ҡатыны

ниҙәр күрмәй», шәкерт сағында «Ғәлиә»нән китеүенә сәбәп булған «Ҡөрьән Аллананмы, түгелме?» мәҡәләһе). Ҡазанда Фәтих Әмирхан, Ғәлиәскәр Ҡамал, Ғабдулла Туҡай менән типә-тиң аралашырлыҡ кимәлгә күтәрелә. Улай ғына ла түгел. Халыҡ тормошон, уның рухи донъяһын, тел байлығын төптән белгәнгә, күп мәсьәләлә айыҡ фекер йөрөтә, теге йәки был күренештәрҙең киләсәген һиҙгер тойомлай. Тәүге осрашыуҙа уҡ ул Туҡайҙың Пушкинға арналған шиғырын «бөтөрөп» ташлай. Сөнки әҫәр башҡорт-татар уҡыусыһына төптө аңлайышһыҙ ғәрәп-фарсы һүҙҙәре менән самаһыҙ сыбарланған була: «Халыҡ ҡына түгел, зыялы ғали йәнәптәребеҙ ҙә аңламай. Ғәлимйәндең ысын күңелдән һөйләгәнен аңланы Ғәлиәскәр Ҡамал. Ошо уҡ фекерҙе Туҡайға Фәтих Әмирхан да ҡат-ҡат әйткән ине лә баһа... Туҡай быға тиклем дә бер кемде лә тыңламаны. Ә Ғәлимйән уның кикереген шаҡтай шиңдерҙе».

Шулай итеп, ябай ауыл муллаһы малайының Күктең етенсе ҡатына күтәрелеүе (үҙе билдәләүенсә, яҙыусы, тәнҡитсе, ғалим, мөғәллим, тарихсы, стилист, телсе булып етешеүе) ышандырырлыҡ һәм мауыҡтырғыс итеп тасуирлана.

Өсөнсө китап («Ожмахҡа бер аҙым») геройҙың 1937 йылда ҡулға алыныуын һүрәтләүҙән башланһа ла, ретроспектив хикәйәләү алымы ҡулланғанлыҡтан, Ғәлимйән Ибраһимовтың Октябрь революцияһынан һуңғы яҙмышын үҙ эсенә ала. Ғаилә тормошо. Үпкә ауырыуы көсәйгәс, Ялтаға күсенеүе. Берҙән-бер улының дүрт кенә йәшендә үлеп ҡалыуы...

Илдең дөрөҫ юлдан барыуына тәрәндән инанып йәшәй Ғәлимйән. Әммә декларацияланған идеалдарҙың көндәлек тормош менән ярашмауы ни тиклем үкенесле! Дәүер идеологияһын сарказм күҙлеге аша бына нисегерәк баһалай автор: «Социализм ожмах уҡ түгел әле. Булыр. Шул уның төп маҡсаттарынан булһа. Былар хәҙергә ожмахтың ишек алды ғына. Ысын ожмах — коммунизм, уға күп ҡалманы инде. Бер аҙым ғына. Кешеләр хәҙер еҙ иләктән үткәрелә. Үткәне — коммунизм гөлбаҡсаһында йәшәйәсәк. Үтмәгәне — иләк өҫтөндә ҡалған кәбәге — елгә осороласаҡ. Юҡ, елгә түгел. Сөнки уларҙың унда терелеүе, ишәйеп китеүе, коммунизм гөлбаҡсаһында йәшәүселәргә аяҡ салып йөрөүҙәре мөмкин. Уларҙы бөтөрөргә, ҡырырға, теге донъяға күпләп оҙатырға кәрәк...»

Халыҡ мәнфәғәтенә йәне-тәне менән бирелгән меңәрләгәндәрҙең береһе булған Ғәлимйән Ибраһимов, үҙен «халыҡ дошманы» тип атағас, ниҙәр кисерҙе икән?! Халҡының рухи пәйғәмбәре кимәленә күтәрелгән шәхес быға бәйле ҡат-ҡат уйланмай булмаҫ. Ғүмер буйына алданып йәшәлгәнме? Бөтә эшләгәнең, илһамлы ижад емештәрең юҡҡа сығасаҡмы? Инаныстарың буш булғанмы ни? Ә бит һин башҡаларҙы ла артыңдан әйҙәнең... Бер-икәүҙе генә лә түгел — йөҙләгәнде, меңләгәнде, тотош милләтеңде... Ерҙә ожмах төҙөргә маташыу үҙе үк уны тамуҡҡа әйләндерҙеме әллә? Һинең яҙмышың ғына түгел, бик күптәрҙеке лә ялған идеалдарға табынғанға көлгә әйләнәме? Ҡыҙғаныс — зиһенле уҡыусы күңелендә мотлаҡ яраласаҡ был һорауҙарға трилогияла яуап юҡ.

1937 йылда милләт һөҙөгө булған шәхестәрҙең трагедияһы халыҡ, ил трагедияһы менән тығыҙ үрелгән. Әҫәрҙең иң көслө булырға тейешле кульминацион өлөшө, арҡа һөйәгенең йомшаҡ булыуы үкенес тойғоһо уята. Трилогияны ҡәрҙәш халыҡ әҫәрҙәре («Абай юлы», «Йылдан да оҙон һуҙыла көн...») фонында ҡарау ҙа беҙҙең файҙаға түгел. Йәнә килеп, геройҙың инде әҙип, ғалим булып

өлгөрөп еткәндән һуңғы эшмәкәрлеге айырыуса психологик юҫыҡта тейешле кимәлдә асылып бөтөңкөрәмәй...

Шулай ҙа художестволы әҫәрҙе унда булмағаны өсөн түгел, ә булғанына бәйле тулайым баһалау дөрөҫөрәктер.

Трилогия билдәле шәхескә арналғанлыҡтан, авторҙың документаль факттарға, архив материалдарына таяныуы тәбиғи. Публицист Суфиян Поварисов эштең был яғын бик яҡшы белә. Бер үк мәлдә яҙыусылыҡ һәләте «кәнсәләр стиле»нә төшөп китеүҙән нык һаҡлай. Тел байлығын уңышлы, урынлы файҙаланыу әҫәрҙе уҡымлы, мауыҡтырғыс итә. Теге йәки был фекер әленән-әле халыҡ аҡылы, халыҡ тәжрибәһе менән нығытыла, мәҡәл-әйтемдәр теҙмәһе менән төйнәлә бара. Мәҫәлән, өҫтән бишек тирбәтеп, аҫтан баланы семетмә; ир-егеттең көсө беләгендә лә, йөрәгендә лә; алғы итәгеңде бала баҫһын, артҡы итәгеңде мал баҫһын... Әҙип йыш ҡына бер мәҡәл-әйтем килтереү менән генә сикләнмәй, ә бер-бер артлы әллә нисәмәһен иҫкә алып үтә: иркәлек һәр кемде ирәйтә; иркә бала итәк йырта... Улай ғына ла түгел, ҡапма-ҡаршылыҡлы фекер үткәргәндәрен дә иҫкә төшөрөп ҡуя: ахмаҡ ҡыҙҙар күрһә ҡыҙа, тиҙерәк ҡулын һуҙа; дәртен йәшергән дарманын тапмаҫ; эсе ҡараңғының йөҙөндә нур булмаҫ; тырыш булған ҡырыҫ булыр... Ғөмүмән, Суфиян Поварисов әҫәрҙәренә — публицистика булһынмы ул, сәхнә әҫәрҙәреме, роман-повестар хаҡында әйтәһе лә түгел — йырлап торған стиль хас. Уларҙа халыҡ аҡылы — халыҡсан тел, ҡанатлы һүҙҙәр аша күңелгә тәрән үтеп инерлек, иҫтә ҡалырлыҡ, фәһемле итеп еткерелә. Бына бер генә өҙөк: «Ир кеше ҡатынын яңғыҙ бер ергә лә ебәрмәй. Имеш, шәриғәт ҡушмай. Унан һуң, арбаның төбө юҡ, бәндәнең кеме юҡ, тигәндәй, яңғыҙ йөрөй торған ҡатын тураһында берәүҙең ғәйбәте бик тиҙ урам «ауыҙына» күсә. Боҙоҡ ауыҙҙар «ул ҡатын фәлән дә төгән», «ирле ирҙәүкә», «иргә баш бирә торған түгел» тигән ғәйбәтте, сүбәк сәйнәп май сыҡмағанлыҡты белһәләр ҙә, мәңге өҙөлмәҫ һағыҙ урынына сыртлатып сәйнәй бирәләр. Был — ҡатын-ҡыҙға ышанмау бәләһе. Хәләл ефетеңде арыш тоғона тығып, ауыҙын сабата бауы менән алағайым ҡыҫып бәйләп йәшәтергә тырышыу касафаты...»

Айырым урындарҙа бер үк ваҡиғаларҙы хәтерһеҙ кешеләй ҡат-ҡат барлап алыу, үҙен аҡламаған осраҡтарҙағы күп һүҙлелек (күп һүҙ китапҡа яҡшы, тиһәләр ҙә, ул хатта трилогия тиклем трилогияны ла бигүк биҙәй торған күренеш түгел шул) кеүек кәмселектәрҙе иҫкә алмағанда, әҫәр онотолоп уҡыла, геройҙар менән айырылғы килмәй, улар яҡын кешеңә әйләнә бара. Китапты япҡанда иһә, ожмах та, тамуҡ та ер өҫтөндә, уны кешеләр үҙҙәре тыуҙыра икән, тигән һығымтаға киләһең.

* * *

Әйтеп үтелеүенсә, автор ҙа, һүҙ барған әҫәрҙең төп геройы ла Башҡортостанда формалашҡан татар зыялылары. Суфиян Поварисовтың иһә Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы булып танылыуы уның тыуған еренә айырыуса бирелгәнлеге тураһында һөйләй. Ундай шәхестәр бер-береһенә ҡан ҡәрҙәшлеге лә, йән ҡәрҙәшлеге лә булған ике күрше халыҡ дуҫлығын нығыта алырҙай күпер булыуы менән ҡиммәт. Был фекерҙең нигеҙлелегенә трилогияны уҡығанда ла ҡайта-ҡайта инанаһың.